09. 12. 2021 й.

Бөгөнгө көндөң девизы- "Башҡорт теле- аҡыл теле"

УҠЫУСЫЛАР БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ БӨЙӨК ШАҒИРЫ МИФТАХЕТДИН КАМАЛЕТДИН УЛЫ КАМАЛЕТДИНОВТЫҢ ТОРМОШ ЮЛЫ БУЙЫНСА ӘҘӘБИ ВИКТОРИНАЛА КӨС ҺЫНАШТЫЛАР.




Синыф мөйөшө
Уголок класса



Туҡһанбай ауылындағы М.Аҡмулла музейы

Аҡмулла һуңғы тапҡыр 1893 йылдың сентябрь айында Ырымбур губернаһы Троицк өйәҙе Туңғатар волосы Сөләймән ауылынан Сәғирә Йомабай ҡыҙына өйләнә. Әммә уларға оҙаҡ бергә йәшәргә насип булмай. Бер мәл ҡунаҡҡа килгәндә Йомабай ҡыҙын Аҡмулланан алып ҡала. Яңынан йәрәшеү йә айырылышыу мәсьәләләрен хәл итеү өсөн Ырымбур Мосолман диниә назараты 4839-сы һанлы указ сығара, һәм уны үтәүҙе Троицк өйәҙе Туңғатар волосы Мулдаҡай ауылы имамы Әхтәм Ғәбделвәхит улы Имашевҡа йөкмәтә. Мифтахетдин Аҡмулла музейы хеҙмәткәрҙәре Әхтәм Имашевтың шәжәрәһен эҙләп тапты. Әле был тарихи документ ентекләп өйрәнелә. Киләсәктә ул үҙ урынын аласаҡ.

Музейҙың иң ҡиммәтле ҡомартҡыһы — Аҡмулланың үҙ ҡулдары менән эшләгән, китап ҡуйыр өсөн йыйылмалы ултырғысы. Ҡаҙағстанда, Урта Азияла ошондай йыйылмалы яһалманы Ҡөрьән йә башҡа китаптарҙы ҡуйып уҡыр өсөн дин әһелдәре, хәлфәләр һәр саҡ үҙҙәре менән йөрөтә торған булған.